❐ Йолаларыбыҙ

ҒАИЛӘ ИМЕНЛЕГЕ

Гөлсинә ЙОСОПОВА

Хәҙер туйҙар үткәреүгә күп аҡса сарыф ителһә лә, йәштәр бының ҡәҙерен белмәй. Саҡ ҡына тормош ауырлығы баҫһа, аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡһа, айырылыу сәбәбе табыла. Һәр кем үҙен генә уйлай, күрәһең. Уртаҡ бала яҙмышы һауала эленеп ҡала. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Төп сәбәбе - ҡиммәттәрҙең үҙгәреүе.

Бөгөн матриархат хөкөм һөрөүе бәкәлгә һуға. Күп ғаиләләрҙә ҡатын - баш. Балаларын үҙенсә тәрбиәләй, барлыҡ эштәрҙе яңғыҙы алып бара. Ире эшкә барып ҡайта ла, ай аҙағында алған аҡсаһын тоттора, әҙерҙе ашай, әҙерҙе кейә лә диванына ауып, телевизорға текәлә, йә компьютерға йомола. Өйгә пакетлап ризыҡ күтәреп ҡайтыу, уларҙан ни ҙә булһа яраштырыу, балаларының мәктәптә нисек өлгәшеүен күҙәтеү, балалар баҡсаһына, түңәрәктәргә йөрөтөү, уҡытыусытәрбиәселәр менән һөйләшеүҙәр алып барыу - барыһы ла ҡатын елкәһендә. Был бик ҙур хата. Ирҙәребеҙ ҡулына бирергә кәрәктер власты. Аҡсаны үҙе тотһон, ризыҡ ташыһын, ғаилә эштәрен, сығымдарын планлаштырһын, кис балалар менән шөғөлләнергә ваҡыт тапһын. Ә елкәһенән күп бурыс төшкән ҡатын үҙен ҡарап йөрөтөр, йылмайыр - ғаилә кәйефе ҡатын-ҡыҙҙан тора бит. Өйҙә лә, эштә лә өлгөрөргә, һәйбәт әсәй булырға ла, карьера яһарға ла ынтылған нескә зат нисек асыуын тышҡа сығармай йөрөтә алһын инде?! Асыулы, йәмһеҙ ҡатын - бары тик уның иренең “уңышы”.

Хәҙер күп ҡатын-ҡыҙ ана шул өлгөрләгә, көслө булыуы менән ғорурлана. Эштә лә һынатмаған, күп бала ла тапҡан гүзәл заттар мактала. Ә ирҙәре һуң? Күберәк уларҙы алға ҡуйырға кәрәктер. Арыу ирең булмаһа улай карьера яһау ҙа мөмкин түгелдер. Боронғо мөнәсәбәттәр һоҡланғыс. Өләсәйҙәребеҙ олатайҙарҙы һәр ваҡыт өҫтөн ҡуйған. Үҙҙәре баш булып йөрөмәгән бер ҙә. Хәҙер килеп алтын, гәүһәр туйҙар гөрләп үтә. Беҙҙең быуындан шундай туйҙар үткәрерлек кимәлгә етеүселәр күп булырмы икән?

Кәләште өс сифатына ҡарап һайлауҙары тураһында хәҙис бар. Матурлығына, байлығына һәм иманына. Ләкин матурлыҡ - бер көнлөк, ул туйҙа ғына кәрәк тиҙәр, ҡырҡ йәштәрҙә егерме йәштәге сибәрлегең һулыған була инде, байлыҡ та - бер айлыҡ. Ҡатын-ҡыҙҙың иң ҙур байлығы - иман. Эскерһеҙ иман. Матур холоҡло, ипле ҡыҙға өйләнгән егет туңмаҫ. Ә ниндәйҙер ялтырауыҡ, сағыу тормош, күңел асыуҙы ғына уйлап өйләнгәндәргә ауырға тура киләсәк. Ғаилә ниндәйҙер иҫәп-хисап, донъяуи маҡсаттарҙан ғына сығып ҡоролһа, тиҙ тарҡала. Күп ҡатын-ҡыҙ үҙ-ара һөйләшкәндә ирҙе уның нимә бүләк итеүенән сығып баһалай. Сәскә бирмәгәне, алтын-гәүһәр алмағанына ебегән мөһөрө тағыла, мөхәббәтенә шик уяна. Тун бүләк итмәгәндәрҙең баһаһы ла еңел тарта. Бәхет ошонан ғына ғибәрәтме икән ни? Әгәр ирең ғаиләһен ҡарай, балалары өсөн өҙөлөп тора икән, тағы нимәгәлер ризаһыҙланып сәскә йә таш көтөп ултырыу... Наҙлы, йылмайыусан кәләшенә ул барыбер бүләк яһаясаҡ. Көтмәгәндә! Бер онотор, икенсегә хәле етеңкерәмәҫ, әммә өсөнсө тапҡырға күңел йылыһын бүләге менән дә иҫбатлап ҡуйыр. Әммә көтөп, талап итеп, үсегеп ултырырға ярамай, минеңсә. Шулай уҡ, үҙендән хәллерәктәргә эйәрергә тырышыу, улар менән ярышыу яман. Ҡатын-ҡыҙ араһында көнсөллөк тә барлыҡҡа килеп ҡуя. Үҙеңдән түбәнерәктәргә ҡарап, хәленә шөкөр итһәң, шул тиклем еңел. Ришүәтселәр байлыҡҡа туймаҫ, ҡатындары арҡаһында ла барлыҡҡа килә ул. Ғаиләлә ниндәйҙер ҡарар ҡабул иткәндә хис-тойғолар менән эш итергә кәрәкмәй, ти аҡыллы китаптар. Ашығыу - шайтандан, тиҙәр бит. Төптән уйлау, асыу баҫылғас хәл итеү күп ҡыйынлыҡтарҙан ҡотҡарып ҡалыр. Аңлашылмаусанлыктар килеп тыуһа, һәр кем иң беренсе үҙенең нимәне дөрөҫ эшләмәгәнен асыкларға тырышһа ине. Ғәйепте хәләленә өйөү түгел, ә үҙеңә һорау биреү: мин ҡайҙа хата ебәрҙем?

Шулай уҡ ғаиләләрҙе “шул кәңәшселәр” ҙә боҙа. “Айырыл”, тиҙәр ҡайһы берәүҙәр, мәсьәләнән ҡотолоу яғын тиҙ хәл итеп. Ҡайҙалыр һинең хыялыңдағыса йәшәмәгән кешенән бер ҡасан да кәңәш алма тип уҡығайным. Кәңәш итеп кешене лә һайлай белеү мөһим. Иң тәү сиратта ул иманлы булһын. Сабырлыҡ, физаҡәрлек. Бер-береңә хөрмәт - ғаиләне ҡотҡарып алып ҡалыусылар. Күп нәмә ҡатын-ҡыҙҙан тора. Беҙҙә хәйләкәрлек тигән сифат бар. Шуны ла ҡуллана белеү кәрәктер. Кәйефең булмаһа ла йылмайыу, етешһеҙлеген тураһын бәреп әйтмәү, оҫта ғына итеп ойоҡбаштарына хужа булырға өйрәтеү һәм башҡалар. Юғиһә, һәр саҡ өйрәтеп, күрһәтмәләр биреп әсәйгә генә әйләнеп китеү ихтималлығы бар. Ә ир-егеттәр бойорғанды, ғәйепләгәнде, үҙеңде өҫтөн ҡуйғанды бер ҙә яратмай. “Яратҡандарының” иһә үҙ баһаһы төшә, оло малайға, хатта быҙауға ла әйләнә. Уның һинең менән бер йортта сыҙай алмай башлауы ла мөмкин. Иреңдең ир булыуын теләһәң, уға баш булма, тиҙәр бит. Ошондай ваҡлыҡтар ҙа тарҡата ул ғаиләне. Уларға етди ҡарамай булмай, сөнки тормош ваҡлыҡтарҙан тора. Беҙҙең һәр көнөбөҙ, һәр йылмайыуыбыҙ, һәр һүҙебеҙ ғаилә именлеге өсөн булһын ине.

❐ Дини календарь

ИЗГЕЛЕК ЭШЛӘРГӘ АШЫҒАЙЫҠ!

Фәшүрә көнө, Фәшүрә байрамы - мосолман донъяһындағы иң әһәмиәтле көндәрҙең береһе. Ул мөхәррәм айының 9-сы көнө тамамланғас башлана. Был көндө Аллаһы Тәғәлә Ерҙе һәм күкте юктан бар иткән, Әҙәм ғәләйһис-сәләмде лә Фәшүрәлә яралтҡан. Изге байрамда пәйғәмбәрҙәрҙең күбеһе бәләләрҙән ҡотолдорола. Мөхәммәд ғәләйһиссәләм, уның сәхәбәләре ошо көндө мөбәрәк һанап, ураҙа тотҡан.

Фәшүрә - сауаптарға өлгәшә торған көн. Был көндә Аллаһы Тәғәләнең бәндәләргә рәхмәте киң асыла. Туҙан бөртөгө тиклем генә ҡылған изгелегебеҙгә лә Раббыбыҙ тау ҡәҙәре сауабын бирә, килер бәләләрҙән һаҡлай. Ошо көндө күңелдәребеҙҙе фәҡәт изгелеккә йүнәлтеп, кешеләргә, бүтән тереклеккә изгелек, итәғәтлек, миһырбанлыҡ, шәфҡәтлелек ҡылыуға көсөбеҙҙә, зиһенебеҙҙе, мөмкинлегебеҙҙе йүнәлтергә бурыслыбыҙ.

Фәшүрә көнөндә балаларына, ҡатынына киң күңеллелек күрһәткән, уларға яңы кейем, йә бүтән берәй бүләк биргән, яҡшы, затлы ризыҡ ашатҡан, байрам рухын булдырған кешегә Аллаһы Тәғәлә киләһе йылдың Фәшүрә көнөнә тиклем ризыҡ киңлеге, донъя бәрәкәте, тормош муллығы насип итә. Бындай бәрәкәтте Раббыбыҙ ул кешенең хәләл ефетенә һәм балаларына ла бирә.

Рамаҙандағы фарыз ураҙаһынан ҡала иң сауаплыһы - мөхәррәм айында Фәшүрә көнөндә тап килтереп тотҡан бер көн ураҙаға Хоҙай 30 сауап бирер.

Шуға ла был изге байрамдың әһәмиәтен аңлап, гонаһтарыбыҙ ярлыҡанһын, сауапҡа өлгәшеү өсөн Фәшүренә доғалар уҡып үткәрергә, изгелектәр ҡылырға ашығайыҡ.

❐ Йәшәү рәүеше

САҘАҠАНЫҢ ХӘЙЕРЛЕНӘН-ХӘЙЕРЛЕҺЕ - ТЕЛДЕ ҺАҠЛАУ

Зилә ХӘЙРУЛЛИНА,
башҡорт теле һәм мәҙәниәте уҡытыусыһы

(“Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының көнүҙәк мәсьәләләре” темаһы аҫтында үткән XIII халыҡ-ара конференциянан һуң уйланыуҙар)

Йожеф Торма ҡыҫҡа, әммә сағыу һәм бай йөкмәткеле тормош юлы үткән. Ул 1943 йылдың 5 октябрендә Венгрияның Кечкемет ҡалаһында тыуа. Йожеф Аттила исемендәге Сегед университетында уҡып сыға. Славян, герман, алтай телдәрен өйрәнә. Билдәле тюрколог, профессор Рона Ташаның дәрестәре унда башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу уята. Зәки Вәлиди Туған, С.Руденко, Г.Кузеев, Ж.Кейекбаев хеҙмәттәре менән таныша, башҡорт телен яҡшы үҙләштерә Й.Торма баш ҡалабыҙға тәүге тапҡыр 1978 йылда килә. Бөтә күңелен биреп, башҡорт телен, халҡының тарихын өйрәнеүгә бағышлай. Мостай Кәримдең “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” әҫәрен венгр теленә тәржемә итә. Был китап уны шул тиклем тетрәндерә. Уның образдарын, этнографик материалдарын бик күп хеҙмәттәрендә ҡуллана.

1986 йылда Торма Башҡортостанда һәм Ырымбур өлкәһе райондарында машина, ат менән һәм йәйәү диалектология, этнография, фольклор материалдары йыя. Ошо бөртөкләп йыйған хеҙмәттәре ярҙамында ул башҡорт лингвистикаһын һәм этнографияһын донъя кимәленә сығара Башҡорт телен, уның йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, халыҡ медицинаһын яҡшы белеүе менән башҡорттарҙың күңелен яулап ала, уларҙың легендар шәхесенә әүерелә. Уның оло йөрәге бөтәһенә лә асыҡ була. Й. Торма венгр халҡының ғына түгел, башҡа халыҡтарҙың, бигерәк тә башҡорт халҡының ah-зарҙарын һәм шатлыҡтарын үҙ йөрәге аша үткәрә. төрки халыҡтарының тарихын, мәҙәниәтен, иң мөһиме - менталитетын яҡшы белгәнгә лә, Венгрия менән Урта Азия республикалары араһындағы дипломатик бәйләнештәрҙе нығытыусы ла ул була. 1990 йылда Зәки Вәлиди Туғандың 100 йыллығына арналған фәнни конференцияла Йожеф Торма башҡорт телендә сығыш яһай. Урыҫ телле башҡорт милләтле йәштәр ошо сығышты тыңлау тәьҫиренән һуң, үҙҙәренең туған башҡорт телен өйрәнә башлай. Башҡорт ғалимдары фәнни докладтарын үҙ телендә яңғырата. Ауырыуына ҡарамаҫтан, ул башҡрт фәненә хеҙмәт итеүен дауам итә. Будапештта ғалимдың докторлыҡ диссертацияһында башҡорт теле темаһы төп урын ала һәм ул уңышлы яҡлана. 2000 йылдың 23 апрелендә уның йөрәге тибеүҙән туҡтай.

Ғүмерен башҡорт халҡы һәм Евразияның башҡа төрки телле халыҡтарын өйрәнеүгә бағышлаған бөйөк венгр ғалимына 2003 йылда Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты бинаһында мемориаль таҡтаташ ҡуйыла.

Был сарала беҙҙе килгән ҡунаҡтар араһында саф башҡортса һөйләшкән, хатта ҡурайҙа ла уйнай белгән Венгрия фәндәр академияһы этнография институты фән эшмәкәре Давид Шомфаи Кара әсир итте.

- Һеҙ ҡайһы ырыуҙан? - тип һораны ул беҙҙән.

- Беҙ - үҫәргәндәр! - тип яуапланык.

- Ә юрматылар бармы икән? - тип башҡорттар менән ҡыҙыҡһыныуын дауам итте хөрмәтле венгр халҡы вәкиле.

Й.Торманың улы сығышынан һуң, башҡорт халҡына мөрәжәғәтте һәм оло рәхмәт һүҙен венгр телендә әйтте. Ә Давид Шофмаи Кара беҙгә саф башҡорт теленә тәржемә итте. Беҙҙең уға һоҡланыуыбыҙ һәм ихтирамыбыҙ тағы ла артты. Телебеҙҙе оло баһалаусы венгр дуҫтарыбыҙ өсөн Рәсәй фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты бинаһында венгр мәҙәниәте кабинеты асылыуы ла оло ҡыуаныс булды.

Үҙ һөнәренә, теленә тоғро коллегам, Яңы Петровка ауылы мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Сәлимә Фәрит ҡыҙы Толомбаева менән уй-фекерҙәребеҙҙе уртаҡлашып, тағы ла бер тапҡыр ошо хәҡиҡәткә инандыҡ - уҡытыусы, туған тел уҡытыусыһы ер йөҙөндә иң кәрәкле, мактауға лайыҡ һөнәр кешеһе. Туған тел - оло хазина. Бөтә башланғыс та туған телдән башлана. Беҙҙең халҡыбыҙҙың теле, тарихы, мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныу, уны өйрәнеү рус һәм сит ил кешеләре тарафынан электән килә һәм хәҙерге ваҡытта ла оло хөрмәт менән өйрәнелә, үҫтерелә, яҡлана.

Ә үҙебеҙ, башҡорттар?! Туған теленән оялған, был телдә һөйләшергә лә теләмәгән, балаларын рус класына, рус төркөменә биреүсе, аҙнаһына өс тапҡыр туған теле булараҡ урыҫ телен уҡырға мәжбүр итеүсе, балаларының туған телде өйрәнеүгә булған хоҡуктарын быуып ятыусы хөрмәтле ата-әсәләр, һеҙгә мөрәжәғәтем! Һеҙгә балаларығыҙ “атай”, “әсәй” тип тә өндәшә алмайҙар, сөнки һеҙ уларға өйрәтмәгәнһегеҙ. “Мам-паптар” күбәйҙе беҙҙең арала. Ни өсөн Илаһи көс милләттәр булдырған, уларға һөйләшергә туған тел биргән һуң? Үҙ туған теленә битарафлыҡ күрһәтеү - иң оло гонаһ бит. Теленде белмәгәс, тимәк, һинең милләтең юҡ. Мин башҡорт, тип әйтә алмайһың һин. Йә кем һуң һин, кем һинең балаларың?

Динебеҙ ҙә үҙ туған телебеҙҙе һаҡларға өндәй. “Саҙаҡаның хәйерленән-хәйерлеһе - телде һаҡлау, телде һаҡлау, телде һаҡлау”, - тип әйтелә хәҙистә. Башҡорттарҙың туған телен юғалтыу һөҙөмтәһендә өләсәйҙәренең ейән-ейәнсәрҙәре менән русса һөйләшергә мәжбүр булыуҙарын күреп, венгр кешеһенең йөрәге әрнегән! “Әгәр йәмғиәт үҙ балаларынан баш тарта икән, тимәк ул үҙенең үткәнен дә һәм киләсәген дә һыҙып ташлай”, - тип яҙып ҡалдырған Йожеф Торма. Венгр ғалимының беҙгә әйтеп ҡалдырған һүҙҙәрен йөрәгебеҙ, аңыбыҙ аша үткәрәйек, туған телебеҙҙең ҡәҙерен беләйек, бергәләп һаҡлайыҡ!